**Төрлө йәштәге “Ҡурай” төркөмө балалары өсөн көҙгө бал сценарийы**

*Зал көҙгө япраҡтар менән биҙәлгән. Зал уртаһында трон тора. Музыка яңғырай, балалар инә, урындарға ултырыша.*

**Алып барыусы.** Беҙгә көҙ килде, ул тирә-яҡты алтынға күмде.

Бөгөн беҙ һеҙҙең менән көҙгө балға сәйәхәткә юлланабыҙ. Унда эләгер өсөн беҙгә тылсымлы һүҙҙәр әйтергә кәрәк. Әйҙәгеҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм минең арттан ҡабатлағыҙ: “Бер, ике, өс, әкиәт ишеге, асылып кит!” Балалар, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ әле, беҙ әкиәт иленә килеп тә еттек.

*(Видео)*

**Алып барыусы**. Ҡыҙҙар, малайҙар, беләһегеҙме, көҙ миҙгеленең өс айы бөгөн беҙгә ҡунаҡҡа килгән.

*(малайҙар сыға)*

**Сентябрь.** Иғтибар, иғтибар! Көҙһылыу бөгөн барыһын да ҡунаҡҡа йыйырға ҡушты.

**Октябрь.** Иғтибар, иғтибар! Приказ булды: бейергә, йырларға, күңел асырға!

**Ноябрь.** Иғтибар, иғтибар! Байрамға Көҙһылыу үҙе килә.

**Алып барыусы.** Бына Көҙһылыу үҙе! Ҡаршы алығыҙ!

*(музыка. Малайҙар баш эйә, Көҙ инә)*

**Көҙ.** Һаумыһығыҙ, хөрмәтле ҡунаҡтар. Беҙ һеҙҙе ошо байрамда күреүебеҙгә шатбыҙ. Барығыҙға ла күренәме, ишетеләме, ҡәҙерле ҡунаҡтар? Улайһа, көҙгө балды башлайбыҙ!

*(ишек тирәһендә “Бында ярамай!”, “Мине үткәрегеҙ!” тигән тауыштар ишетелә)*

**Көҙ.** Кем беҙҙең байрамды боҙорға уйлай?

*(залға Ҡараҫҡы йүгереп сыға)*

**Ҡараҫҡы** (тронға килә, баш эйә). Хөрмәтле Көҙһылыу, һүҙемде әйтергә рөхсәт ит инде.

**Көҙ.** Һин кем? Ҡайҙан килдең? Ни өсөн байрамға матур итеп кейенеп килмәнең?

**Ҡараҫҡы.** Матур итеп кейенмәйем,
Шулай торам һәр ваҡыт.
Баҡсаларҙа көн итәмен,
Ҡоштар ҡыуам, юҡ ваҡыт.

**Көҙ**. Асыҡ итеп һөйлә әле, аңламайым һине.

**Ҡараҫҡы**. Көҙһылыу, мин ялҡау йә эшһеҙ түгелмен. Мин – Баҡса ҡараҫҡыһы. Йәй буйына, ниндәй генә көн булмаһын, мин баҡсала торам. Ашамайым, эсмәйем, йоҡламайым – хужамдың уңышын һаҡлайым. Ышанмаһаң, балаларҙан һорайыҡ, улар мине баҡсала күргәндәре бар. Әйтегеҙ әле, балалар, мин бит йәй буйы ҡоштарҙы баҡсанан ҡыуып торам бит?!

**Балалар.** Эйе, дөрөҫ!

**Ҡараҫҡы.** Мине байрамға индермәйҙәр, кейемең иҫке, тиҙәр. Нимә биргәндәр – шуны кейәм инде. Матур кейемдә торһам, минән кем ҡурҡһын?

**Көҙ.** Асыуланма, Ҡараҫҡы. Беҙ барыһын да асыҡланыҡ. Әйҙә, байрамға рәхим ит!

*(ҡараҫҡы, Көҙгә баш эйеп, һеперткеһен автомат кеүек тотоп алып балалар янына барып ултыра)*

**Көҙ.** Дуҫтар, әйҙәгеҙ һеҙҙең менән күңел асып алайыҡ. Көҙҙө моңһоу тиҙәр бит, моңһоуланып ултырмайыҡ инде.

**Ҡараҫҡы.** Ниндәй моңһоу булһын ти ул. Ҡарағыҙ әле, япраҡтар нисек матур итеп бейеп йөрөй!

*(Япраҡтар бейеүе)*

**Көҙ.** Ә хәҙер беҙҙең балалар ашарға яраҡлы бәшмәктәрҙе ағыулыларынан айырамы икәнен тикшерәйек әле.

**Ҡарасҡы.** Балалар, уйнап алайыҡмы?

*("Бәшмәктәрҙе йый" уйыны)*

**Ҡарасҡы.** Көҙһылыу, күрәһеңме беҙҙең балалар ниндәй шәп!

**Көҙ.** Эйе, бигерәк маладистар икән үҙҙәре. Афарин! Ҡарағыҙ әле, аҡланда ике бәшмәк ултырып ҡалған.

*(балалар уртаға сыға)*

**Беренсе бәшмәк.** Ерҙе тишеп килеп сыҡтыҡ, ямғыр һыуына ҡойоноп ҙур булып үҫеп еттек!

**Икенсе бәшмәк.** Хәҙер беҙҙе барыһы ла йыраҡтан күреп тора! Тик икебеҙгә генә бында күңелһеҙ шул.

**Көҙ.** Ҡайғырмағыҙ, дуҫтар! Музыкаль инструменттарҙа уйнап ебәрһәк, кәйефтәрегеҙ тиҙ генә күтәрелеп китер.

**Икенсе бәшмәк.** Беҙ уйнай белмәйбеҙ шул.

**Ҡарасҡы.** Беҙ үҙебеҙ һеҙҙе уйнарға өйрәтәбеҙ!

*("Бөрйән егеттәре" оркестры)*

**Беренсе бәшмәк.** Кәйефтәр күтәрелеп китте, бейеп тә алыр инек әле!

**Көҙ.** Мин тылсымлы таяғым ярҙамында тирә-яҡтағы бәшмәктәрҙе хәҙер тиҙ генә йыйып алам.

*(бәшмәктәр бейеүе)*

**Көҙ.** Сентябрь менән япраҡтарға һоҡландыҡ, Октябрь менән бәшмәк йыйҙыҡ, Ноябрь улым, һин нимә менән һөйөндөрөрһөң?

**Ноябрь.** Нимә менән ҡыуандырырға икән һине, Көҙһылыу?

**Ҡарасҡы.** Ноябрь, моңһоуланып торма инде! Хөрмәтле ҡунаҡтар, әйҙәгеҙ бергәләп уйнап алайыҡ!

**Балалар**. Эйе!

**Ҡарасҡы.** Хәҙер ике командаға бүленәбеҙ. Ҡыҙҙар – тамсы, малайҙар ел була. Тамсы нисек тама әле?

**Балалар**. Тып-тып.

**Ҡарасҡы**. Эйе! Ноябрь айында ел нисек олой икән, кем иҫләй?

**Балалар**. У-у-у!

**Ҡарасҡы.** Ә хәҙер бөтәбеҙ бергә (тып-тып, у-у-у!!!)

Ноябрь, нисек, оҡшаталармы балалар?

**Ноябрь**. Эйе, афарин, балалар!

**Ҡарасҡы.** Балалар, Ноябргә шиғырҙарығыҙҙы һөйләп, йырығыҙҙы йырлап күрһәтәгеҙме?

*(балалар йырлай, шиғыр һөйләй)*

**Көҙ.** Мин көләс тә, моңһоу ҙа, ҡояшлы ла, болотло ла, ямғырлы ла, ҡарлы ла – мин төрлө. Йомартлығым, матурлығым өсөн һеҙ мине яратаһығыҙ. Бөгөнгө матур байрамда һеҙҙе күреүемә шатмын! Барығыҙға ла ҙур рәхмәт!

**Алып барыусы**. Көҙгө балыбыҙ аҙағына ла яҡынлашты. Байрам барығыҙҙың да кәйефен күтәргәндер тигән ышаныстамын. Балалар, байрам һеҙгә оҡшанымы?

**Балалар.** Эйе!

**Ҡарасҡы.** Балалар, әйҙәгеҙ бергәләшеп иҫтәлеккә фотоға төшәйек.

*Фотосессия.*

*Балалар персонаждар менән хушлаша.*